# Изге Раббым

Маҡтау Һиңә, Изге Раббым –
Мин ашығам Һине данларға,
Ата, Улы, һәм Изге Рух!
Аҡыл етмәй Һине аңларға.

Эй, Хоҙайым, ғәфү итсе мине,
Хаталарым бик күп, аңлайым!
Яҙмыш һуҡмағынан уҙған саҡта,
Ғүмер итәм, алға атлайым.

Раббым Үҙең, мине, "изге" тинең,
Лайыҡ булмаһам да ул исемгә ,
Йәнем Һине данлай икән,
Тимәк, Изге Рух, йәшәй миндә!

Зарланмайым мин ауырлыҡҡа,
Бары тик, Һиңә ынтылам.
Ғүмер уҙған һайын мин ныҒыраҡ,
Бер Хоҙайым, һиңә табынам.

Теләктәр теләй – теләй,
Доғалар ҡылам көн дә.
Дан Һиңә, Изге Өслөк –
Һин булдың миңә билдә.

Был яҡты донъяларға Үҙең,
Тыуҙырғанның бит, мине Хоҙайым.
Күрәсәгем Күктәр батшалығы,
Һин һыҙған юлдан атлайым.

Һин ҡушҡандан тайпылмаһын,
Улдар менән ҡыҙҙарың.
Сөнки был тормоштоң нужаһына,
Һин түҙәргә ҡушаһың.

Маҡтау бары Һиңә, Изге Өслөк!
Барлығыңа иман килтерҙем.
Хужа бит һин бар ғәләмгә,
Гонаһтарҙан Үҙең, беҙҙе кисерҙең.

Һынауҙар беҙгә үлсәп бирелгән,
Раббының ҡәҙерен беләйек.
Беҙҙе көткән барлыҡ һынауҙарҙы,
Сабырлыҡ менән үтәйек!

Маҡтау Һиңә, Изге Өслөк
Һин шундай серле, һөйкөмлө!
Кем мине ярата икән,
Был ғәләмдә Һинең шикеле.

Тормош юлдарынан туғандар,
Доға ҡылып бергә үтәйек!
Үкенмәҫлек булһын үткәнебеҙ –
Яҡты бер эҙ һалып китәйек!

Бир, Хоҙайым, күңел тыныслығы,
Уҡыр өсөн Изге Һүҙеңде,
Таҙа намыҫ, акыл иңдер миңә,
Күктә күрер өсөн Үҙеңде.

Хоҙай биргән ғүмер ҡабатланмаҫ,
Тайпылмайса барайыҡ алға.
Һәр кемгә, Изге Һүҙҙе насип итһен,
Һуңғы һулышҡаса таратырға.

Теҙҙәремде сүгәм Һинең алдыңда,
Доға ҡылып Һинән һорайым.
Юғалтмаҫ өсөн иманым көсөн,
Гонаһтарҙы йыусы, Хоҙайым!

Ҡаршылыҡтар юлға теҙелһә лә,
Ярҙамыңдан Хоҙай ташлама.
Күңелемә шатлыҡ биргән өсөн,
Шиғырым Һиңә бағышлана.